*Башҡорт теле йылы*

# Туған телгә — 100 аҙым

Аҫҡар үҙәк район китапханаһы «Туған телгә — 100 аҙым» тип исемләнгән акция уҙғарҙы. Был проектҡа башҡорт яҙыусыларының иң уҡымлы, иң ҡыҙыҡлы йөҙ әҫәре индерелгән. Ҡитапханасылар әҙәби әҫәрҙәргә ҡыҙыҡһыныу уятыуҙы маҡсат итеп әҙерләгән сарала башҡорт телендә уҡырға яратыусы иң әүҙем китап уҡыусылар ҡатнашты. Улар китапхана баҡсаһында осрашып, Мостай Кәрим, Динис Бүләков, Хәсән Назар, Зәйнәб Биишеваның үлемһеҙ әҫәрҙәрен уҡыны. Маргарита Ғималетдинова «Россиянмын» шиғырын аһәңле итеп башҡарҙы.

Акцияла ҡатнашыусыларҙы район башлығының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Раян Фәттәхов тәбрикләп, китапханасыларға башҡорт телен үҫтереүгә, йәш быуында туған телгә һөйөү уятыуға индергән өлөштәре өсөн рәхмәт белдерҙе.

— Өйҙә башҡортса аралашыу бала өсөн иң яҡшы тәрбиә алымы. Әкиәттәрҙән башлап, башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәрен өйрәнеүгә күсһәгеҙ, был уларҙа башҡортса уҡырға тартылыу, телгә ихтирам уятасаҡ, — тине Раян Баян улы.

Люциә ОМОРҘАҠОВА.

